14 май, 2019 йыл

*Профориентация*

# «Һомай»ҙа оҫталыҡ дәресе

***Хәҙерге заманда ер йөҙөндә ете меңдән ашыу һөнәр бар. Һөнәр һайлау — кеше яҙмышында иң мөһим аҙым булып тора.***

Рәмилә ИСТАНБАЕВА

Ошоно көҙ уңында тотоп, район китапханаһы янында эшләп килгән «Һомай» клубы етәксеһе Мөнирә Уйылданова үҙ һөнәрҙәрен яҡшы белгән, шөғөлдәрен яратҡан, заман елдәренә бирешмәй, яңы идеяларға бай һөнәр эйәләре менән таныштырыу, уларҙың шөғөлдәрен рекламалау маҡсатында «Минең тормош һөнәрем» исемле библиожурфикс үткәрҙе. Сараға Таһир Кусимов исемендәге гимназияның 11-се класс ҡыҙҙары (класс етәксеһе И. И. Ғәлиәкбәрова) саҡырылды.

Тәүге булып «Һомай» ҡатын-ҡыҙҙар клубы ағзаһы, милли стилдәге футболкалар, галстуктар эшләү менән шөғөлләнгән Айгөл Утарбаева үҙенең шөғөлө хаҡында ҡыҙыҡлы итеп бәйән итте.

Артабан «Йондоҙ» гәзите вәкиле Рәмзиә Көмөшбаева баҫманың барлыҡҡа килеүе, артабанғы үҫеше һәм бөгөнгөһө тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирҙе, заказ буйынса футболкаларға, бокалдарға башҡорт һәм рус телдәрендә төрлө фотоһүрәттәр менән яҙыуҙар эшләү нескә-лектәре хаҡында һөйләне.

«Ҡаприз» матурлыҡ салоны хеҙмәткәре, лешмейкер Дилара Ҡилдейәрова керпек үҫтереү серҙәре менән бүлешһә, «Зеркало» бөҙрәханаһынан маникюр оҫтаһы Марина Романова тырнаҡтарҙы тәртиптә тотоу тураһында һөйләп үтте.

Ташбулат ауылынан рәссам, визажист, сәстәргә ҡуйыу өсөн биҙәүестәр эшләүсе Зәлиә Фәйезова бай күргәҙмә ойоштторҙо. «Зеркало» бөҙрәханаһы парикмахеры Сәғиҙә Рысбаева ҡыҙҙарға нисек тигеҙ итеп сәс ҡырҡырға, тиҙ һәм еңел прическалар эшләргә өйрәтте.

Ҙур сәскәләр эшләүсе булараҡ билдәле Мөнирә Уйылданова библиожурфиксҭа ҡатнашыусыларға Бөйөк Еңеүҙең символы булған ҡыҙыл кәнәфер һәм Георгий таҫмаһынан брошка эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙе.

Сараны «Һомай» ҡатын-ҡыҙҙар клубы ағзаһы Лена Сафарова алып барҙы.